# Башҡорт ғәскәрҙәренең Петроградта нәшер ителгән «Бәхет көнө» журнал-альбомы



”Бәхет көнө” журнал-альбомының титул бите

Республиканың ижтимағи ойошмалар үҙәк архивында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, башҡорт ғәскәрҙәре тарихына бәйле, Башҡортостан автономияһы төҙөлгән осорға ҡараған бик тә ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле бер документ һаҡлана. Ул — Башҡорт хөкүмәте һәм башҡорт ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы 1920 йылдың ғинуарында Петроградта баҫтырып сығарылған “Бәхет көнө” исемле журнал-альбомы[1]. Ул осорҙа ҡулланылған төрки телендә яҙылған.

Билдәле булыуынса, 1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыға. 23 мартта Мәскәүҙә Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡортостан Совет автономияһы тураһында килешеү төҙөлә. Башҡорт хөкүмәте үҙенең вәкәләтлектәрен яңы төҙөлгән Башҡортостан Ваҡытлы Революцион Комитетына (Башревкомға)

[1] ЦГАОО РБ. Ф.9776 Оп.2 Д.3.

тапшыра. Әммә 1919 йылдың яҙында аҡтар һөжүмгә көсәп, Башҡортостан территорияһын баҫып ала. Башревком Саранск ҡалаһына (хәҙерге Мордовия Республикаһының баш ҡалаһы) эвакуацияланырға мәжбүр була. Бында ул башҡорт ғәскәрҙәрен яңынан ойоштороу менән шөғөлләнә. Әхмәтзәки Вәлидиҙең ныҡышмаллығы арҡаһында, 23 марттағы килешеү буйынса, Үҙәк власть башҡорттарға дүрт полклы бер атлы дивизия, өс полклы бер уҡсы бригада һәм артиллерия дивизионынан торған айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһын ойоштороуҙы рөхсәт итә. Улар Колчакка ҡаршы ебәрелергә тейеш була. Башҡорт кавалерия дивизияһын, ойошторолоп бөтөр-бөтмәҫтән, 1919 йылдың июнендә Башҡортостанға түгел, ә Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ташлайҙар. Унан, сентябрь айында, Петроград фронтына ебәрәләр. Оҙаҡламай Бәләбәйҙә ойошторолған Башҡорт уҡсы бригадаһын да Петроградҡа оҙаталар. Шулай итеп, 1919 йылдың октябренә башҡорт ғәскәрҙәренең күпселеге — 10 меңгә яҡын башҡорт яугиры — Петроградта туплана. Улар Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә. Ғәскәрҙәрҙең төп бурысы Петроградты Юденич армияһынан ҡурсалау була.

Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроградҡа килеп төшөү менән, уның сәйәси бүлеге "Салауат" исемле ғәскәри гәзит сығарыуҙы яйға һала. Уның мөхәррире итеп Ғабдулла Ғисмәти тәғәйенләнә. Баҫманы сығарыуҙа дивизияның комиссары Нуриәғзәм Таһиров әүҙем ҡатнаша. Фотоларҙан күренеүенсә, Петроградҡа килеп төшкән Башҡорт уҡсы бригадаһы яугирҙарын Башҡорт кавалерия дивизияһы сәйәси бүлеге "Салауат" гәзите менән ҡаршылаған булған.

1920 йылдың ғинуарында Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының сәйәси бүлектәре тарафынан Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыуға ҡарата "Бәхет көнө" тип аталған күләмле генә журнал-альбом сығарыла. Был журнал нимәһе менән ҡыҙыҡлы һуң? Тәү ситтә унда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидиҙең һәм әлегә беҙгә аҙ билдәле башҡорт комиссарҙарының яҙмалары урын алған. Бынан тыш, альбомда ҡырҡтан ашыу фотоһүрәт баҫылған. Журналдың тәүге өлөшөндә башҡорт һалдаттарына советтар яғына сығыуҙың әһәмиәтен аңлатҡан, был аҙымдың башҡорт халҡына файҙаһы, Үҙәк властың Башҡорт автономияһына ярҙамы тураһында бәйән иткән яҙмалар урын алған. Сөнки был осорҙа ғәскәрҙәрҙә, большевиктар башҡорттарға автономия бирмәйәсәк, тигән һүҙҙәр, төрлө провокациялар күп булған. Быны архив документтары асыҡ һөйләй. Мәҫәлән, Башревком рәйесе Харис Йомағолов 1919 йылдың 19 декабрендә Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа ошо турала бына ниндәй хат яҙған (документтар оригинал текстары буйынса бирелә)[2]:

[2] ЦГИА РБ. Ф.1107 Оп.1 Д.42 Л.31.

*Дорогой тов. Тагиров Нур-Агзам!*

*Шлю Вам и всем тов. Красн. — башкирам, находящимся в Петрограде от имени Воен.-Рев.-Ком. Баш. Сов. Рес. Горячий и сердечный привет!!!*

*Затем тов. Нур-Агзам сообщи, всем тов. Башкирам-красн., как находящимся в настоящие время в Петрограде, так и вновь прибывающим с востока и юга в Петроград, следующие:*

*1. Президиум Всеросс. Центр. Исп. Ком. Сов. Раб. Крес. Красноар. И Казачих депутатов постановил назначить комиссию для решения вопроса о создании власти в Сов. Башкирии, в эту комиссию, по вызову Президиума ВЦИК от имени Воен. Рев. Ком. Баш. Сов. Рес. В Моск. Прибыл я (Юмагулов) и Ф. Тухватуллин. Эта комиссия устроила заседание 15 сентября, где была принята резолюция, которая является теперь постанов. ВЦИК и как таковая объявлена в "Известиях ВЦИК" за № 206, от 17 сен...*

*Итак, тов. Нур-Агзам, наконец-то Башкирия стала автономной Крас. Сов. Башкирией.*

*Сообщи всем-всем красн.-башкирам!!! Пусть неподдаются провокации!!!*

*Нур-Агзам! По некоторым сведениям наших кр.-ар. в Белебее настраивались против нас т.е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры чтобы рассеять лживые, провокационные слухи кр.-ар. прочти постановление ВЦИК, наши приказы и обращ.*

Сәйәси бүлектәрҙең агитацион мөрәжәғәттәренән һуң Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорттарҙың боронғо ғәскәрҙәре хаҡында" тип исемләнгән тарихи мәҡәләһе урын алған. Бында ул башҡорттоң хәрби тарихына ҡыҫҡаса байҡау яһаған һәм батша власының башҡорттарға ҡарата алып барған сәйәсәтенә баһа биргән. Әхмәтзәки Вәлиди был мәҡәләһендә ентекле тарихи һандар, мәғлүмәттәр килтергән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ул был теманы ҡасан өйрәнеп өлгөргән икән? 1917—1919 йылдарҙа тарих менән шөғөлләнеп ултырырға уның, ай-һай, ваҡыты булмағандыр. Тимәк, был теманы 1917 йылға тиклем өйрәнгән, күрәһең.



Әхмәтзәки Вәлидиҙән һуң Хәлим Әмировтың “Башҡорт хәрәкәте” тигән мәҡәләһе килә. Унда: “Хәлим иптәш Әмировтың Петроградтағы башҡорт полктарындағы беренсе коммунистар конференцияһында һөйләгән “Башҡорт хәрәкәте” докладынан алынды”, — тиелгән. Һалдаттар алдында Башҡорт милли хәрәкәте тураһында һөйләгән кеше кем һуң? Архив документтары Х.Әмировтың шәхесенә асыҡлыҡ индерә. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Хәлим Насретдин улы Әмиров 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәтендә эшләгән. 1918 йылдың сентябрендә кантондарҙа халыҡ мәғарифы бүлектәре ойоштороп йөрөгән. Декабрь айында Башҡортостан хөкүмәтенең халыҡ мәғарифы бүлеге мөдиренең ярҙамсыһы вазифаһын үтәгән[3]. 1919 йылдың февралендә ул полктарға ҡыҙылдар яғына сығыу тураһындағы фарманды еткереү өсөн штаб тарафынан Баймаҡҡа ебәрелә. 21 февралдә Темәс ауылында I Бөтә Башҡорт хәрби съезында сығыш яһай. Артабан 1919 йылдың 18 майында Саранскиҙа Башҡорт кавалерия дивизияһына комиссар итеп тәғәйенләнгән[4]. Июндә дивизия менән Көньяҡ фронтҡа китә. Сентябрь айында дивизия составында Петроградҡа килә. Октябрҙә Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәре эше буйынса особоуполномоченный итеп тәғәйенләнә. Күреүебеҙсә, Хәлим Әмиров — Башҡорт милли хәрәкәтенең иң ауыр осоронда уның уртаһында ҡайнаған, ғәскәрҙәр менән бергә йөрөгән комиссарҙарҙың береһе булған.

Әлеге журналда баҫылған докладында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тарихы бик ҡыҫҡа, әммә ентекле итеп бәйән ителгән. Ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың февраль-март айҙарында Башҡортостанда булып үткән фажиғәле ваҡиғаларҙы, Ҡыҙыл Армияның баш-баштаҡлығын асыҡ яҙып үткән.

Артабан “Бәхет көнө” журналында “Күсәрбай” исемле хикәйә бирелгән. Хикәйәнең тәүге өлөшөндә Петроградҡа килгән башҡорт ғәскәрҙәренең митингы тасуирланһа, икенсе өлөшөндә һүҙ ғәскәрҙәрҙең һуғышҡа әҙерлеге тураһында бара. Аҙаҡҡы бүлектә полк командирының әмер йөрөтөүсеһе Күсәрбай исемле башҡорт һалдатының төндә дошман тылына разведкаға барыуы, уның батырлыҡтары хаҡында бәйән ителә. Әйткәндәй, журналист Мостафа Солтанов “Ватандаш” журналында баҫылған мәҡәләһендә (1998 йыл, № 2) 1919 йылда Петроградта хеҙмәт иткән эскадрон командиры Ғәйнулла Күсәрбаевты телгә ала. Уның фамилияһының әлеге хикәйәгә бәйләнеше барҙыр, моғайын. Был әҙәби әҫәрҙең авторының исем-шәрифе лә бик үк асыҡ түгел. Хикәйәнең аҙағында “Фәтхи” тигән имза ғына ҡуйылған. Ғалим Миңлеғәле Нәҙерғоловтың фекеренсә, ул Фәтхелҡадир Сөләймәнов (эмиграцияла Абдулҡадир Инан) булырға тейеш. Нисек кенә булмаһын, граждандар һуғышы осорондағы башҡорт ғәскәрҙәре тураһында тәүге әҙәби әҫәр булараҡ, тарихсылар өсөн дә, әҙәбиәтселәр өсөн дә бик ҡыҙыҡлы.

“Күсәрбай” хикәйәһенән һуң тағы бер күренекле милли хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары Ғабдулла Ибраһимовтың

[3] А.-З.Валидов — организатор автономии Башкортостана. У истоков федерализма в России (1917—1920). Документы и материалы. Ч. I. Уфа: Китап, 2005. 238-се бит.

[4] Национально-государственное устройство Башкортостана (1917—1925). Документы и материалы. Т. 2. Ч. II. Уфа: Китап.

“Башҡортостан хәрәкәте” тигән мәҡәләһе урын алған. Әйткәндәй, быға тиклем “Ватандаш” журналында уның “Петроград өсөн көрәштә башҡорттар” тигән хеҙмәте баҫылғайны (1997 йыл, №2). Ғабдулла Ибраһимовтың да, Хәлим Әмиров кеүек, башҡорт ғәскәрҙәрендә идеология, агитация эшен алып барған төплө белемле, әүҙем яҙышҡан башҡорт комиссарҙарының береһе икәнлеге әлеге мәҡәләһенән асыҡ күренә. Был шәхес тураһында ла матбуғатта күп яҙылған, тип әйтеп булмай. Ейәнсәре Мөнирә Йәнсурина үҙенең мәҡәләһендә (“Ватандаш”, 1998 йыл, №2), Ғ.Ибраһимов хәҙерге Күгәрсен районы Сапыҡ ауылынан (1896 йылда тыуған), мулла ғаиләһенән, күренекле мәҙрәсәләрҙә уҡыған, аҙаҡ үҙе һабаҡ биргән, ә граждандар һуғышы осоронда Мортазин бригадаһында комиссар булып хеҙмәт иткән, тип яҙа. Билдәле журналист Рәүеф Насиров та “Уҙамандарҙы эҙләйем” китабында Ғабдулла Ибраһимов тураһында ҡыҫҡаса ғына яҙып үткән. Ә бына милли хәрәкәт буйынса архив документтарында уның исемен күрергә була. Уларҙан күренеүенсә, 1918 йылдың көҙөндә Ғ.Ибраһимов Ҡыпсаҡ кантоны башҡармаһында сәркәтип булып эшләгән. “Башҡортостан хөкүмәтенең теле” гәзитенә әүҙем яҙышҡан. 1919 йылда Бәләбәйҙә ойошторолған Башҡорт уҡсы бригадаһына комиссар итеп ҡуйыла. Уның составында Петроградта була. Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: Ғ.Ибраһимовтың ижади псевдонимы Ҡыпсаҡ булған, тип яҙалар. Ә бына “Бәхет көнө”ндә ул Ҡараҡыпсаҡ тип имза ҡуйған.

Артабан был журналда 1919 йылдың 23 мартында Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында төҙөлгән Башҡортостан Совет Автономиялы Республикаһы ойоштороу тураһындағы килешеүҙең тулы тексы баҫылған. Шулай уҡ Башҡортостан автономияһына ҡаршы эшләмәҫкә, башҡорттарҙы йәберләмәҫкә, тигән фарман менән Ҡыҙыл Армияға ебәрелгән Троцкийҙың телеграммаларының тексы бирелгән әлеге йыйынтыҡ Харис Йомағоловтың: “Иптәштәр! Был юғарыла күрһәтелгән фармандар үҙҙәре өсөн үҙҙәре бик яҡшы һөйләйҙәр, улар үҙҙәренән-үҙҙәре мәғлүм, уны аңғартып тораһы юҡ. Беҙ хитапнамә менән һәммә башҡорт халҡына мөрәжәғәт итәбеҙ: яҙылығыҙ Башҡорт Ҡыҙыл армияһына!

Хәҙер башҡорттарҙың үҙҙәренең советтар нигеҙендә төҙөлгән автономияһы бар — башҡорттарҙың күптән теләгән маҡсаты хасил булды. Ул автономияны һаҡлау өсөн Башҡорт армияһы төҙөлә. Бына шул Башҡорт Ҡыҙыл армияһына яҙылырға һеҙҙе саҡырам!

Йәшәһен Башҡортостан армияһы!

Советтар нигеҙендә төҙөлгән Автономиялы Башҡортостандың Хәрби революцион комитеты”, — тигән мөрәжәғәте менән тамамлана.

“Ватандаш”ты уҡыусылар иғтибарына “Бәхет көнө” журналының иҫке төркиҙән тәржемәһен, йәғни үрҙә телгә алынған Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһы мөрәжәғәттәре, Әхмәтзәки Вәлидиҙең “Башҡорттарҙың боронғо ғәскәре хаҡында”, Хәлим Әмировтың “Башҡорт хәрәкәте”, Ғабдулла Ибраһимовтың “Башҡортостан хәрәкәте” исемле яҙмалары һәм Фәтхиҙең “Күсәрбай” хикәйәһен тәҡдим итмәксемен. Оригинал текстарҙың стилистикаһы үҙгәртелмәне.

*Азат ЯРМУЛЛИН.*

*(Фотолар ”Бәхет көнө” журналынан һәм Милли музей фондынан алынды).*

# БӘХЕТ КӨНӨ

Бөгөнгө ун һигеҙенсе февраль көнө — башҡорт халҡының яуыз байҙар ялсыларының алдауынан ҡотолған көнө.

Бөтһөн байҙарға ялсылыҡ итеү!
Йәшәһен халыҡтың иркенлектә йәшәүе!

Бөгөнгө ун һигеҙенсе февраль көнө — ярлы башҡорт халҡының үҙ файҙаһын аңлап, ярлыларҙың яҡлаусыһы — Советтар власы яғына сығып, ярлы меҫкен халыҡтарҙың азатлығы өсөн һуғышырға ант иткән көнө.
Йәшәһен ярлы халыҡтың берләшеүе!
Йәшәһен Советтар власы!

Бөгөн, 18-се февраль көнө — башҡорт халҡының яуыз Учредилка (Учредитель йыйылышы ағзалары Комитеты, йәки Һамар хөкүмәте. — **А.Я.**), меньшевиктар, эсерҙар көслөгөнән ҡотолоп, хеҙмәт-эштең өҫтөнлөккә сығыуын раҫлаған коммунистарҙың сафына теҙелгән көндәр.

Йәшәһен коммунистар партияһы!
Йәшәһен коммунистар партияһының башлығы — рухы иптәш Ленин!

Иптәштәр!

Башҡорт халҡының батша баш-баштаҡлығынан ғына түгел, Учредилка ағзаларының, эсер-меньшевиктарҙың иблисләнеп (иблис кеүек. — **А.Я.**) алдауынан ҡотолоуына нәҡ бер йыл тулды. Романов нәҫелдәренең мәсхәрәләүенә, баш-баштаҡланыуына ҡаршы әллә нисә мәртәбә баш күтәргән башҡорт халҡы үҙенә азат тормошҡа ынтылыуы һәм иҙелгән халыҡтарға мәҙәни һәм иҡтисади хәлдәрен күтәреү юлында бөтә ҡеүәтен сарыф итеүгә мөмкинлек биреүсе мөстәҡил йәшәүгә талпыныуы өсөн бик ныҡ язаланды. Башҡорт халҡы батша золомона ҡаршы етмештән артыҡ баш күтәрҙе, ләкин һәр береһендә ҙур һәләкәткә осраны, ләкин ул һис бер ваҡыт рухын һүндермәне — Романов нәҫеле батшаларының золомонан ҡотолоуға өмөтөн өҙмәне. Февраль революцияһы башҡорттар өсөн халыҡ тормошон яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк, күптән көтөлгән һәм халыҡтарҙың иҙелгән, ҡоллоҡ хәленән ҡотолорға сәбәпсе булған саҡ кеүек күренде.

Ләкин ул саҡта хөкүмәт башында тороусы эсер-меньшевиктар оҙаҡ көттөрмәнеләр, үҙҙәренең ысын йөҙөн тиҙ астылар һәм башҡорттарҙың бара торған юлы улар менән бергә түгел икәнлеге асыҡланды.

Ләкин Учредилка ағзаларының иблисләнеп алдауына бирелеп киткән башҡорт халҡы Рәсәйҙең ысын революцион пролетариаты менән Октябрь революцияһының беренсе көндәренән үк берегеүгә мөмкинлек

таба алманы. Учредилка ғәскәрҙәре менән ҡоршап алынған Башҡортостан Советтар Рәсәйенә әллә нисә мәртәбә вәкил күндерҙе. Ләкин ҡайһы берҙәре фронт аша сыҡҡанда тотолоп атылдылар, ҡайһы берҙәре фронт аша сыға алмай ҡалдылар. Ахыр улар, 18-се февраль 1919 йыл беҙҙең вәкилдәребеҙ, Советтар Рәсәйенә сығып, Советтар власы вәкилдәре менән Башҡортостан автономияһы хаҡында килешеү төҙөй алдылар.

Ошо саҡтан башлап башҡорт штыктары ялған аҡ монархистарға ҡаршы әйләнделәр. Данлыҡлы, баһадир башҡорт ғәскәрҙәре Көньяҡ фронтта һәм Петроград янында аҡ монархистарға һәм контрреволюционерҙарға ҡаршы һуғышыуҙа Совет Рәсәйенең эшселәре һәм крәҫтиәндәре менән ысын-ысындан берлектәрен иҫбат иттеләр. Ошо саҡтан башлап башҡорт халҡы дәүләт тормошон Советтар ҡанундары буйынса төҙөргә тотондо. Кантон, улус һәм ауыл Советтары төҙөлдө һәм башҡорт халҡы күмәкләп эшкә сумды. Саботаж һәм ҡушылған эштәрҙе үтәүҙән баш тартыу һис ерҙә күренмәй.

Бер йыл эсендә Башҡортостан күп нәмә эшләргә өлгөрҙө: дәүләттә хәрби һәм башҡа хакимиәт урынлаштырылды. Ашау-эсеү, ауыл хужалығы, мәғариф органдары төҙөлдө, шаҡтай уҡ рәткә һалындылар.

Шулай итеп, башҡорт халҡының күп йылдан бирле көткән өмөтө Советтар власы тарафынан үтәлде. Бына шунлыҡтан бөтөн башҡорт халҡы, бер кеше кеүек, Советтар власы өсөн һуғыша, сөнки ул власть — үҙебеҙҙең власть.

Инде бөтә донъя контрреволюцияһын тар-мар килтереүгә һәм сит дәүләттәрҙәге аҡ монархистар ояһын төбө-тамырынан тибергә күп ҡалманы.

Иптәштәр! Ғәмәли революцион эште теүәлләп сығығыҙ! Шул саҡта, иптәштәр, һуғыш сафынан эш сафына күсербеҙ.

Эстония беҙҙең менән солох яһаны һәм башҡа ҡырҙағы дәүләттәр ҙә беҙҙең менән солох яһарға мәжбүр булырҙар, шанлы Ҡыҙыл армияларҙың ныҡ тороуҙары һәм был дәүләттәрҙәге беҙҙең ҡәрҙәш эшсе һәм крәҫтиәндәрҙең баҫымсылыҡ итеүҙәре арҡаһында.

Бөтә донъя эшселәре инде аңланылар: яңғыҙ Советтар Рәсәйе генә бөтә әҙәм балаларына бәхет һәм изгелек килтерәлер һәм бөтә донъя ижтимағи революцияһына юл асылды, таҙартылды. Бына шунлыҡтан Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡарары буйынса, беҙҙең армияларҙың ҡайһы бер бүлемдәре һуғыш майҙанынан эш-хеҙмәткә күсәләр. Инде беҙҙең ҡыҙыл ғәскәрҙәр алдында ике фронт бар: емереклек фронты һәм аҡ монархистар фронты.

Беҙ ышанабыҙ, революция дошманы менән һуғыш яландарында үҙенә шан ҡаҙанған башҡорт иптәштәр емереклеккә ҡаршы көрәштә еңеү һәм бөйөк хеҙмәте менән үҙен зиннәтләрҙәр.

Советтар Рәсәйе яғына сығыуға йыл тулған бөгөнгө көн революция дошманы аҡ монархистар менән, шулай уҡ даими ижтимағи тормош дошманы емереклек менән тамам еңгәнсә һуғышырға ысын-ысындан әйҙәй.

## Йыл тулды

Байғураларҙың, генерал-жандармдарҙың төп терәге булған батша тәхете аҫты-өҫкә әйләнеү менән, бөтә халыҡҡа шатлыҡ һәм һәр бер ҡәүемгә, һәр бер кешегә үҙе теләгәнсә торорға иркенлек килде, тип Рәсәйҙәге бөтә халыҡ шатланғайны. Ләкин шатлыҡтары бушҡа сыға яҙҙы. Генералдар, жандармдар урынына шуларҙың уҡ хеҙмәтен үтәүселәр, эсерҙар-меньшевиктар эш башына менеп ултырып, элекке байҙарҙың йырын йырларға тотонғайнылар.

Шул уҡ дөмөккән Николай кешеләре кеүек үк, халыҡҡа тегене биреү иртәрәк, быны бирергә ярамай, тип мығырларға тотонғайнылар. Гел рәхәттә һәм рәхәтте тик тыныс тороуҙа, тип уйлаусы уҡыған, аҡ ҡул (интеллигенция. — **А.Я.**) халыҡтар ҙа шул меньшевик-эсерҙарҙың көйөн раҫланы һәм шул турала революция выжданы алдында антыбыҙ менән танылһын!

Һуғыш сафтарында ныҡлыҡ һәм ҡурҡмаусылыҡ йәшәһен!
Күмәкләп төҙөү эше йәшәһен!
Бөтә яҡ ярлыларының тыныс хеҙмәте йәшәһен!
Йәшәһен бөтә донъя ярлыларының берләшеүе!
Йәшәһен Коммунистар партияһы!
Йәшәһен Өсөнсө Интернационал!
Йәшәһен бөтә донъя Советтар власы!
Йәшәһен Советтар Башҡортостаны!

Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының
Сәйәси бүлектәре.

Шулай итеп, мең бәлә, миллион ҡорбан бәрәбәренә алынған эшсе-крәҫтиәндәрҙең хөрриәте көскә генә ҡәбергә күмелмәй ҡалды.

Петроград эшселәре булмаһа, бәлки, шулай булыр ҙа ине. Петроград эшселәренең ғәйрәте арҡаһында Октябрь революцияһы майҙанға килде. Рәсәйҙә йәшәүсе бөтә халыҡҡа тамам иркен рәүештә йәшәүҙәренә мөмкинлек килде. Элекке заман бюрократтары ғәҙәтенсә, Учредилка-фәлән, тип торманылар. Һәр кем азат йәшәү өсөн тыуған, шунлыҡтан уларҙың азатлыҡтарын раҫлау өсөн һүҙ бутҡаһы яһап маташыуҙың мәғәнәһе юҡ. Һәр кемгә ирек, һәр кем үҙе теләгәнсә тора башлаһын", — тигән лозунг — Октябрь революцияһының беренсе һүҙе.

Шул саҡтан башлап, Башҡортостан халҡы ла үҙе теләгәнсә йәшәй башлаған булһа ла, үҙәктән ҡасҡан аҡ монархистар, Учредилка ағзаларының ҡотортоуҙарына, алдауҙарына эйәреп, уларға ҡушылып Советтар власына ҡаршы һуғышырға тотонғайны. Икенсе төрлө әйткәндә, Хужа Насретдин кеүек, үҙе ултырған ботаҡты үҙе киҫергә керешкәйне, үҙенә үҙе ҡәбер ҡаҙырға тотонғайны. Шулай итеп, урынһыҙ ерҙә бик күп ҡорбандар, бик ҙур һәләкәт күрҙеләр. "Ирҙән иман ҡотолмай" тигәндәй, һуң булһа ла, былтыр, 18 февралдә, башҡорт ғәскәрҙәре

советтар яғына сығып, иркен-мөстәкил Башҡортостан төҙөү хаҡында килешеү төҙөнөләр.

Шул советтар яғына күсеүгә бөгөн саҡ бер йыл тулды. Бөгөнгө көн — башҡорт халҡының тарихында иң бөйөк, иң изге көндәрҙең береһе. Бөгөнгө көндә Башҡортостан халҡы үҙе кеүек ярлы һәм үҙ көнөн үҙе күреүсе Рәсәй эшселәре-крәҫтиәндәренә ҡаршы ҡорал күтәреп сыҡмаҫҡа һүҙ бирҙе. Бөгөнгө көн башҡорт халҡы байғураларға ҡолсолоҡ итеүҙең харам икәнлегенә ныҡ төшөндө. Иң изге нәмә — хеҙмәт һәм үҙ көнөңдө үҙең күреү икәнлеге бөгөнгө көндә һәр бер башҡорт балаһының башына керҙе. Был көн — кеше ҡулы менән ут көрәүселәрҙең муйыны аҫҡа килтерелгән көн. Был көн башҡорт халҡының алдаусылар тоҙағынан ҡотолоуына бер йыл тулды. Ошо уҙған бер йыл эсендә башҡорт халҡы үҙ күҙе менән күреп ҡәнәғәт булды. Совет хөкүмәте һис бер ваҡытта ваҡ халыҡтарҙың үҙ теләктәренсә йәшәүенә ҡаршы килмәне. Бәлки, уларға һәр төрлө ярҙам да күрһәтелде: Ватандарын төҙөү өсөн нисә йөҙ миллион аҡсалар бирҙе, аң-белеме бар ышаныслы кешеләрен ҡуйҙы, өҫ-баштарын кейендереү өсөн мануфактуралар, һәр төрлө кейем-һалымдар бирҙе, ауыл хужалығын алып барыу өсөн һәр төрлө әсбаптар биргән кеүек, уҡыу-уҡытыу эштәре өсөн китаптар, ҡағыҙ-ҡәләмдәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ебәрҙе һәм ебәреп тора.

Бына шунлыҡтан башҡорт ярлы халҡын яратыусы һәр бер кеше Совет власын ысын-ысындан яратып, уның өсөн бөтөн мал-йәнен ҡорбан итергә әҙер торасаҡтыр. Петроград сафындағы башҡорт балалары үҙҙәренең баһадир һуғышыуҙары һәм ғилем-мәғариф алыуға ынтылыуҙары арҡаһында бындағы эшселәр, крәҫтиәндәргә үҙҙәрен ысын иптәш итеп таныттылар, революцияның ысын юлбашсылары булған Петроград эшселәре-крәҫтиәндәре менән йән дуҫҡа әүерелделәр.

Шулай итеп, бөтөн донъя халҡының ҡәрҙәшләнеү нигеҙе һалынғандан-һалына бара.

Күмәкләп төҙөү эше йәшәһен!
Бөтә яҡ ярлыларының тыныс хеҙмәте йәшәһен!
Йәшәһен бөтә донъя ярлыларының берләшеүе!
Йәшәһен Коммунистар партияһы!
Йәшәһен Өсөнсө Интернационал!
Йәшәһен бөтә донъя Советтар власы!
Йәшәһен Советтар Башҡортостаны!

## Башҡорттарҙың боронғо ғәскәрҙәре хаҡында

Башҡорттоң ысын армия булып хеҙмәт итеүе 1798-се йылдан башланған, ләкин башҡорт борон-борондан уҡ ғәскәри халыҡ булғанлыҡтан, Рәсәй хөкүмәте ҡулына кереү менән, үҙ ихтыярҙары менән үк ғәскәр хеҙмәтенә барған. Башҡорт ғәскәре хаҡында беренсе хәбәр 1608-се йылда күренә. 1676-сы йыл бер меңләп башҡорт Ҡырым һуғышына барған һәм төрлө ваҡыттарҙа поляктарға ҡаршы барғандар. Ләкин был хеҙ-

мəттəрҙең барыһына ла телəгəн кешелəрҙең барыуы үҙ ихтыярында булған. 1754-се йыл 14-се марттан башлап, Рəсəй хөкүмəте башҡорттарҙан кəрəк сағында ғəскəр алыуға əмер сығарған һəм шул ваҡыттан башлап 1797-се йылға саҡлы линия хеҙмəттəренə (йəғни мəмлəкəттең сиктəрендəге ҡəлғəлəрҙə хеҙмəткə) барғандар. 1755-се йыл хеҙмəттə 1969 кеше булған. 1754-се йылға саҡлы хеҙмəттəре өсөн жалование алмағандар. Ҡылған эштəренə ҡарап награда ғына алғандар. Əммə 1754-се йылдан 1797-се йылға ҡəҙəр хеҙмəт итеүселəргə жалование, фураж һəм провиант бирелгəн. Башҡорттарҙың 1798-се йылға саҡлы иткəн ғəскəри хеҙмəтен беренсе дəүер тип атарға була. Ул саҡта һəммə башҡорт ғəскəре тəртип эштəрендə үҙе телəгəн формала (ихтыярҙа. — **А.Я.**) булған. Рəсəйҙең регуляр ғəскəре кеүек дөйөм ҡанундарға ҡарамаған. Хеҙмəткə телəп сыҡҡан кешелəр булһынмы, хөкүмəт əмере буйынса хеҙмəткə барғандар булһынмы, барыһы ла үҙҙəре телəгəн кешене баш итеп һайлап ҡуйып, үҙҙəренсə эш күргəндəр. 1798-се йылдан башлап 1863-сө йылдың 14-се майына саҡлы башҡорттар ярым регуляр (иррегулярный) ғəскəрлек хеҙмəтенə мəжбүр керетелгəндəр. Был хеҙмəт хəҙерге казактарҙың хеҙмəте кеүек булған. Башҡорттар менəн бергə күрше торған мишəрҙəр ҙə был хеҙмəткə йəлеп ителгəн. 1798-се йыл башҡорттарҙан 4513 кеше, мишəрҙəр 1200 кеше бирергə тейеш булған. 17 йəштəн 46 йəшкə саҡлы кешелəр һəммəһе лə хеҙмəттə хисапланғандар. Тик эшкə ашмаған ҡарттар ғына хеҙмəттəн ҡотолған. Барыһы дүрт өйгə бер һалдат тура килгəн. Хеҙмəт өсөн айына бер һум жалование алғандар. Лəкин барлыҡ кейем, ат, эйəр-өпсөн, тамаҡ ашау барыһы үҙ елкəлəренə йөклəнгəн. Əммə походҡа киткəн саҡта, хеҙмəт иткəн урындарынан йөҙ саҡырым киткəс, аттарына бесəн, үҙҙəренə тамаҡ бирелгəн. Һəр бер полктың тыуы (байрағы) булған. Кейемдəре аҡ яғалы күк буҫтау сəкмəн, киң күк салбар, салбарҙа ҡыҙыл лампас булған. Баштарында аҡ йөндəн (кейеҙҙəн. — **А.Я.**) башлыҡ булған. Башлыҡ сите бөгөлөп, юғары ҡалҡып торған



һәм маңлайҙан аҫта һәм арттан йырыҡлы булған, ҡайыш-ҡәмәр һәм күн портупея, патрон сумкалары елкәнән уң яҡ ҡултыҡ аҫтына аҫылған булған. Итектәре йылҡы тиреһенән булған. Кәрәк-яраҡтары: мылтыҡ, һәр кешегә ике пистолет, һөңгө, ҡылыс, уҡ-йәйә, ҡылыс үтмәҫкә тимер кейем булған. Ҡорал, кейемдәре яҡшы һәм бик ауыр булған. Башҡорт ғәскәре бигерәк ат өҫтөндә оҫта йөрөй, һөңгө менән оҫта эш ҡыла, уҡ-мылтыҡтан бик мәргән атыу, һуғыш майҙанында береһе-береһен дошманға бирмәй берҙәм, батыр булыу менән шөһрәт алғандар.

Ғәскәрҙең өйҙәге төҙөлөшө кантондарға бүленгән булған. Башҡорттар 11 кантон, мишәрҙәр 5 кантон булған. Казак кантондарының өҫтөнән Войсковое управление һәм атамандары булған, әммә башҡорт, мишәрҙәрҙә ул булмаған. Сөнки Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙың барыһын бер ергә йыя торған идара яһауҙан ҡурҡҡан. Уларҙы бик ныҡ бүлеп тотҡан. Шундай уҡ һуғыш сафында башҡорт ғәскәре урыҫтарҙағы кеүек бригада, дивизиялар булып бергә йыйылырға рөхсәт булманы һәр полк үҙ башына, төрлө яҡҡа ҡуйылған. 1802-се йыл башҡорт ғәскәренең һаны 5519 кеше булған һәм бөтә ғәскәрҙәр ҙә фәҡәт мәмләкәттең сиген һаҡлау (линия) хеҙмәттәрендә тотолғандар. 1790-сы йылдан башлап башҡорт ерендәге типтәрҙәр ҙә хеҙмәткә алынғандар. Ләкин уларҙың үҙ самаларына полктары булмаған, улар барыһы ике полк булған. Шунан артыҡ алынмаған һәм “Уфимский казачий полк” тип аталған, офицерҙары Дон казактарынан булған һәм Ырымбур линия начальнигына буйһонғандар. Был ике полк типтәрҙәрҙең үҙҙәренән йыйылған аҡса менән тотолған. 1802-се йыл һәр типтәр полкында 1030 кеше ине. Әммә башҡортҡа килгәндә, быларҙың начальниктары алда уҡ үҙҙәренән булып килгәнлектән, Рәсәй хөкүмәте ул ғәҙәтте боҙа алмаған, башҡорттарҙан командирҙар ҡуйылыр булған. Командирҙар, казак ғәскәрендәге кеүек, йөҙ башы, хорунжий, яһауыл тигән исемдәр менән йөрөтөлгәндәр. 1811-се йылдан башҡорт ғәскәрҙәре сит мәмләкәттәр менән һуғышыу өсөн ебәрелә башлағандар. 1811-се йыл сит хеҙмәт өсөн ике полк ебәрелгән, 1812-се йыл Француз һуғышына ҡаратып башҡорттан егерме полк төҙөлә һәм 1813—1814-се йылдарҙа Парижға, Наполеонға ҡаршы барғандар. Париж ҡалаһына тәү башлап барып кереүсе башҡорттар булған. Был һуғыштарҙа башҡорттар ғәжәп күп батырлыҡтар күрһәткәндәр. Ләкин Француз һуғышы бөтөп, ҡайтҡас та, урыҫ башҡорт полктарын йәнә кәметкән. Мохтаж сағында башҡортҡа күп вәғәҙәләр, бүләктәр биреп, кеше итеп ҡарау, әммә мохтажлыҡ үткәс тә бөйөргә таянып, башҡортто эшкә һанамау, уны йәберләүҡыҫыу урыҫтың ғәҙәте булған. 1822-се йыл Ырымбур хәрби губернаторы башҡорттан 15 полк, мишәрҙәрҙән 3 полк яһайыҡ, тип проект керетһә лә, ул ғәмәлгә ашмаған. Башҡорттарҙан улай күп полктар төҙөмәй, линия хеҙмәттәренә ҡуйырға булғандар. 1828—1829-сы йыл Төрөк һуғышы башланып киткәс, башҡорт полктарын йәнә күбәйтеп, үҫтермәк булғандар. Ләкин унда ла ни бары ике полк ҡына ебәргәндәр, башҡаларын линия хеҙмәтендә тотҡандар. 1830-сы йылдарҙа Башҡорт ғәскәрен бөтөрөү уйына кергәндәр, уларҙың былай ғәскәр булып тороуы Рәсәй өсөн хәүефле, тигән уйға килгәндәр. Ырымбур губернаторҙары

Сухтелен, Перовский, шул фекерҙе ҡеүәтләп, ул саҡтағы батшаға ғариза биргәндәр һәм 1835-се йыл ике типтәр полкы бераүгә ҡалдырылған һәм “1-се Ырымбур казачий полкы” тип аталған, 1844-се йыл “Уфимский полк” тип кенә атала башлаған, ләкин 1845-се йыл уны ла бөтөргәндәр. Башҡорт ғәскәрҙәрен дә, шулай итеп, әкренләп кәметергә булғандар, барыһын бер юлы бөтөрһәк, башҡорт ҡуҙғалыр, тигәндәр. Ул саҡта Башҡортостанда урыҫ аҙ, әммә башҡорт күп булғас, был хәүеф бигерәк тә көслө булған: 1825-се йыл башҡорт һәм мишәрҙәр 345493 йән, 1835-се йыл башҡорттар менән мишәрҙәр (232000) типтәрҙәр менән 333000 йән ине, әммә урыҫтар бөтөн Ырымбур, Өфө яҡтарында барыһы 82000 генә ине. Башҡорт ғәскәрен кәметеү, уның урынына урыҫ ғәскәрен күбәйтеүҙе ҡеүәтләп, Сухтелен 1832-се йыл: 1) биш мишәр кантонлығынан[5] бер полк ҡына яһау; 2) 9-сы, 2-се, 5-се кантондар, күбеһе казактарға яҡын башҡорт кантондарын һәм 4-се кантондың бер өлөшөн ғәскәр рәүешендә ҡалдырыу; 3) 4-се, 2-се, 5-се кантондарҙы Ырымбурға ҡаратыу, әммә үҙ ихтыярҙары менән Һарытау яғына күсеп киткән 9-сы кантон башҡорттарын[6] Уральский казачий войскоға ҡаратыу; 4) бүтән башҡорттарҙың бөтәһен дә ғәскәрлектән сығарып, әкренләп крәҫтиән хәленә төшөрөү кәрәк, тип, дүрт бүлектән торған проект керетте һәм элекке Ырымбур губернаторы Эссен етәкселегендә махсус комиссия төҙөлөп, шуны ҡарап ҡабул иттеләр һәм шуларҙы үткәреү өсөн комиссия ошо сараларҙы ҡабул итте:

1) башҡорттарҙы алдап, йыуатып тотоу, уларҙың ғәскәрлектәре бөтөрөлмәгәндәй итеп күрһәтеү өсөн уларға Войсковое управление асыу, ләкин башында торған командир урыҫ генералы булһын (Каруанһарай һалынып, Башҡорт ғәскәри идараһы шунда яһалды);

2) башҡорттарҙы почта йөрөтөү хеҙмәтенән ҡотолдороу;

3) кантондарҙы әкренләп хәрби хеҙмәттән сығарыу, эште улар ҡулынан алып өйәҙҙәргә биреү;

4) башҡорттарға ер һатырға ирек биреү, унда урыҫтарҙы ултыртырға мөмкинлек булһын;

5) кантондарҙы улусҡа бүлеү һәм был улустарҙы башта дүрт исем менән йөрөтөү;

6) дүрт уҫал башҡорт полкын ситтә тотоу.

---

[5] Мишәрҙәрҙең кантондары Ырымбур губернаһы менән Һарытау губерналарында булған.

[6] Был башҡорттар электән башҡа башҡорттарҙан айырылыбыраҡ ситтә ҡалған халыҡ ине. Былар хәҙер Уральский ҡалаһынан түбәнерәк казачий араһына күсеп тороп, бер ваҡыт казачий менән килешмәй, Һарытау губернаһына күскәндәр. Улар аҙаҡтан Быҙаулыҡ өйәҙендәге Һеңрән башҡорттары менән бергә 9-сы кантонлыҡ булып торҙолар. Улар 1825 йылдарҙа барыһы 862 йән булғандар. Һуңғы заманда улар Уральский һәм Һарытау яғынан хәҙерге Һамар губернаһында Уральский область эсендә Кәмәлек һәм Ырғыҙ буйҙарында Ималай һәм Күҙәбай исемендә ике улус булып ултырғандар һәм Һамар губернаһы Николай (Пугачев) өйәҙенә ҡарағандар. Башҡорт ревкомының рәйесе Харис Йомағолов шул башҡорттарҙан. Һеңрән башҡорттары Быҙаулыҡ өйәҙендә Любим улусында торалар. Уларҙан сыҡҡан хәҙер хөкүмәт ағзаһы Яхъя Сәлихов.



*Әхмәтзәки Вәлиди*

7) башҡорттарға етәкселек иткән түрә һәм башлыҡтарын әкренләп бөтөрөү;

8) башҡорттарҙы алдар өсөн әҙләп алтын-көмөш миҙалдар, аҡса, бүләктәр һәм бер аҙ пенсиялар биреү;

9) төрлө һылтауҙар менән кантондарҙы урындарынан алыштырыу.

Был эштәрҙе бик сер итеп тоторға булһалар ҙа, сер булып ҡала алманы. 1834-се йыл башҡорттар, урыҫ беҙҙе крәҫтиән итеп ҡалдыра икән, тип, фетнә ҡуптарҙы, ләкин фетнә ҙур көс менән баҫылды, һуғыш хәленә барып етмәне. Халыҡ араһында урыҫ суҡындыра икән, тип, урыҫтың иген һалыу өсөн орлоҡ һаҡлауға мөгәзәй (склад. — **А.Я.**) һалыуға ҡушыуын да, Перовский әйтеүе буйынса, иген иктерергә тырышыуын да, бөтәһен дә бер яуызлыҡ тип ҡарап, бик ғауғаланды. Ләкин урыҫ быға ҡараманы, үҙенең көсөнә таянып, комиссияның ҡарарын үткәрә башланы. Ғәскәр утыҙ процентҡа саҡлы кәметелде, башҡорт кантондары служилый һәм неслужилый тип икегә бүленде. Һуңғыларынан ғәскәр алмай башланылар. 1836-сы йыл 30-сы майҙа Временный штат управления Башкиро-мещеряцкого войска раҫланып, Башҡорт-мишәр ғәскәри идараһы асылды. Был идараның башында тороусы кеше башҡорт ғәскәренең командующийы тип атала ине һәм дивизия командиры хоҡуғында ине. Уның канцелярияһы, адъютанттары булдырылды, кантон начальнигы һәм ярҙамсыһы өҫтөнә попечителдәр ҡуйылды, был попечителдәр штаб-офицерҙарҙан ине. Улар кантон начальниктары һәм йортауай старшиналарҙы тикшереп тора ине. “Кантондарҙа суд эштәрен тикшереп тороуҙа башҡорттарға ярҙам өсөн”, тип стряпчийҙар ҡуйылды. 1840-сы йыл Башкиро-мещеряцкое управление тағы киң штаб менән раҫланды. Был идара башҡорт эшен махсус ҡарап тороу, башҡортто ҡоллоҡҡа алыуҙы тәртиплерәк юлға һалыу өсөн ҡоролған ине. Шул рәүештә Башҡорт ғәскәре бөтөрөлөү юлына кергән булһа ла, һаман тиҙ бөтөрә алмай әкренләп кенә бөтөрөлдө. Ҡалғандары хеҙмәт итә бирҙеләр. 1839-сы йыл айырым башҡорт сотнялары Хиуа һуғышына барҙылар. Аҡмәсет һуғышына (башҡорт араһында ул “Һырдарья походы” тип мәшһүр) барҙылар. Был ваҡыттарҙа Башҡорт ғәскәренең башлығы Перовский ине. 1853-сө йылдан башлап 1856-сы йылға саҡлы ике башҡорт полкы Петербург янында Фин ҡултығында ҡарауыл хеҙмәттәрендә торҙолар һәм шул уҡ йылдарҙа Ҡырымда Севастополь һуғыштары башланып, Рәсәйҙең хәле йәнә ауырайып киткәс, йәнә башҡорттарҙың ғәскәрҙәрен күбәйтә башланылар. Севастополь һуғыштарында башҡорттар төрөктәргә ҡаршы һуғыштылар. Бында биш сотнялы дүрт башҡорт полкы һуғышты. Ләкин бына шул һуғыш мәлендә башҡорттоң бәхете (яҙмышы. — **А.Я.**) хәл ҡылына. 1) Шул һуғыштарҙа башҡорттар төрөктәргә ҡаршы ихлас һуғыштылар. Ҡырымдағы

нуғайҙар урыҫтың серҙәрен төрөккә әйтеп, төрөккә юл күрһәтеп, Ҡырымдан ҡыуалай башланылар. Башҡорттар ҙа шундай эштәрҙә шөбһәле булып, башҡорт ғәскәрен тотоу Рәсәй өсөн ысындан уҡ хәүефле икән, тигән уй күбәйҙе. 2) Икенсенән, ул ваҡыттарҙа Төркөстан тарафтары Рәсәй ҡулына кереп, Рәсәйҙең шәреҡ тарафында мосолман-типтәрҙәр күбәйеп киткәс, мосолманы күп ҡырғыҙ (Ҡаҙағстан. — **А.Я.**), Төркөстанға сиктәш Башҡортостанда мосолман — Башҡорт ғәскәре тотоу хөкүмәт өсөн бик хәүефле күренде. 3) Шуның өҫтөнә, өсөнсөгә шул ваҡыт батша булған Икенсе Александр, ғөмүмән, инородецтарға ҡарата бик яман сәйәсәт тота башланы. 1855-се йыл мишәрҙәрҙең ғәскәре бөтөнләй бөтөрөлдө һәм идараһы “Управление Башкирского войска” тип аталып ҡалды. Шундай 1863-сө йыл 14-се майҙа Икенсе Александр батша Башҡорт ғәскәрен бөтөнләй бөтөрҙө һәм башҡорттарҙы крәҫтиән хәленә ҡалдырып, идара итеү хаҡында “Положение о башкирах” тигән махсус закон сығарҙы, көнбайыштағы кантондар бөтөрөлдө. 1865-се йыл 2-се июль законы менән көнсығыштағы, Ырымбур яҡтарындағы кантондар ҙа бөтөрөлөп, башҡорт Эске эштәр министрлығына ҡаратылып, крәҫтиән хәленә ҡалды. Башҡорттоң “Әрме заманы” тигәне шунда бөттө. Бынан һуң да башҡорттарҙан 1882-се йылға саҡлы Ырымбурҙа бер башҡорт полкы яһап тоттолар. Ләкин ул элекке урыҫ хөкүмәте күҙенә төшкәнерәк синыф: дворян, бай балаларынан ғына ғибәрәт булды, иғтибары булманы. Башҡорт үҙ ваҡытында һуғыштарҙа күрһәткән һөнәрҙәре менән француздар тарафынан “Северные амуры” исемен алды.

Был заман башҡорттоң иң бәхетле көндәре түгел ине, бәлки, 1737-се йыл башҡорттарҙың ҡоролтай-йыйындары бөтөрөлгәндән һуңғы дәүерҙәге иң ауыр ...хурлыҡҡа төшөү ваҡыттарылыр. Башҡорттоң бәхетле саҡтары — 1737 йылдан элек үҙ башына мөхтәриәт (үҙаллы. — **А.Я.**) торған ваҡыттары, Нуғай, Күсемдәр менән үткәргән замандарылыр. Ләкин, шулай булғанда ла, әрме замандары, әрме заманының әүәлге йылдары Рәсәй ҡулы аҫтына кергән заманы эсендә башҡорттоң донъя араһына ҡатышып, ғәскәри тәрбиә алып, мәғрифәтле Европа ғилемен ала башлаған егеттәре, докторҙары (ғилемле кешеләре. — **А.Я.**) күбәйеп, күҙе асыла башлаған көндәрелер. Ул замандың ҡалдыҡтарынан башҡорт ауыҙындағы “Перовский”, “Һыр”, “Әрме”, “Эскадрон”, “Циалковский”, “Ҡаһым түрә”, “Йософ майор” һәм төрлө кантон көйҙәре тигән көйҙәр һаман халыҡтың йөрәгендә һаҡлана. Каруанһарайҙың бинаһы, Ипәк буйында Ғәбделсәләм ауылындағы казарма үә мастерской бионалары, Стәрле өйәҙендә Суҡайлы буйында Башкирский конский запастың урындары — беҙҙең халыҡтың урыҫ ҡулында үткәргән ауыр көндәре араһында, нисек булһа ла яҡтыраҡ көндәрҙең ғәләмәттәре тип хәтерҙә тотолаларҙыр.

*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ.*

## Башҡорт хәрәкәте[7]

Мәскәүҙә йыйыласаҡ II мосолман коммунистарының съезында мөһим мәсьәләләр араһында, татар-башҡорт мәсьәләһе алдыбыҙҙа тора. Был мәсьәлә хаҡында беҙҙән вәкил булып барасаҡ иптәштәргә ҡыҫҡа ғына материал булһын уйы менән башҡорттарҙың был һуңғы 1917-се йылдан башлап революцион хәрәкәттәре хаҡында һөйләмәксе булам.

Башҡорт халҡының элекке заманаларҙағы революцион хәрәкәттәренә һәм уларҙың тарихтарына ҡағылмайса тик ошо һуңғы Рәсәйҙәге революцияла башҡорттарҙың ниндәй урын тотҡанлыҡтарын күрһәтеп уҙайым. 1917-се йыл февралдә тыуған бөйөк Рәсәй революцияһының башынан уҡ башҡорт халҡының теләге милләттәргә ерле мөхтәриәт — территориальное самоопределение наций булды.

Революцияның әүәлге дәүерҙәрендәге булған Ваҡытлы хөкүмәттәр башҡорттарҙы ерле мөхтәриәтле азат бер халыҡ итеп танымаһалар ҙа, башҡорт халҡы үҙенең Өфө, Ырымбурҙа булған әүәлге дөйөм йыйылыштарында, башҡорт халҡына ҡағылышлы юғарылағы лозунгыны ғәмәлгә ҡуйыу өсөн Башҡортостан исемендәге айырым бер өлкә проектын ғәмәлгә ҡуйыуҙы алға сығарҙы һәм шул юлда хәрәкәт итәсәген асыҡтан-асыҡ белгертте.

Быуаттар буйына ireклек өсөн ҡан түккән башҡорт халҡы бығаса иҙелеп килгән милләттәр тәҡдире хәл ҡылына торған был революцион дәүерҙә үҙенең яҙмышын хәл ҡылыу эшен башҡаларға тапшырмай, үҙе генә хәл ҡылырға тейеш икәнлеген бик асыҡ белә ине. Башҡалар кеүек иркен йәшәргә хаҡы булған башҡорт халҡы ла иркенлек алып ҡалыуға үә шул иркенлектең, кәрәк булһа, мәнфәғәттәрен һаҡларға тейеш икәнлеген һәр бер башҡорт белә ине һәм шул юлда хәрәкәт итә ине. Был беҙҙең өсөн берҙән-бер юл ине.

Башҡорт илендә төҙөлгән башҡорт төбәк шуралары үә уларҙың тармаҡтары ошо әҙерлек юлында күп кенә эштәр эшләнеләр, йәғни, бер башҡа иҙелгән милләттәр кеүек, Октябрь революцияһына ҡәҙәр хакимиәт һөргән Керенский һәм уның яһарға тырышҡан Учредительный Собраниеһынан: «Беҙгә ерле мөхтәриәт кәрәк, шуны бирмәҫһегеҙме?» — тип кенә тороуҙан башҡорт халҡы уҙғайны. Уның сәйәси күҙе башҡаларға ҡарағанда асығыраҡ ине.

Шуның өсөн дә башҡорт халҡы был дәүерҙә үҙенең ерле мөхтәриәтен ғәмәлгә ҡуйыу өсөн бөтә әҙерлектәрен күреп бөтөрҙө.

1917-се йыл декабрь айында Ырымбурҙа булған Башҡорт ҡоролтайы ошо әҙерлекте ҡәтғи рәүештә тамамланы. Башҡорт халҡының теләге булған "Ерле мөхтәриәтен", ниһайәт, тормошҡа уҙҙырҙы.

Башҡорт иле "Хөр Башҡортостан" тип иғлан ҡылынды.

Ҡоролтай Ҙур һәм Кесе Башҡортостан проекттарының һуңғыһын ҡабул итте. Кесе Башҡортостанда идара өсөн хөкүмәт һайланды.

---

[7] Хәлим иптәш Әмировтың Петроградтағы башҡорт полктарындағы беренсе коммунистар конференцияһында һөйләнгән "Башҡорт хәрәкәте" докладынан алынды.

Эске идараһында Башҡортостан кантондар исемендәге 13 өлкәгә бүленде.

Башҡорт халҡының иркенлек донъяһына сығыу юлдары ҙур — ҡәтғи, тарихи, мөһим аҙымдар яһаған был Беренсе Башҡорт ҡоролтайы таралғандан һуң бер ай самаһы уҙғас булһа кәрәк, Ырымбурҙа һәм губернаның күп урындарында синфи көрәштән килеп сыҡҡан хөкүмәт көсө — Совет власына күсте, был яңы хөкүмәттең, бигерәк тә иҙелгән, тапалған милләттәрҙең хоҡуҡтарын һәм уларҙың тулы иркенлеген тәьмин ҡыла торған бер хөкүмәт икәнлеген белеп, яңы ғына эшкә тотонған Башҡорт хөкүмәте Ырымбур губерна Башҡарма Комитетына, башҡорт халҡын ерле мөхтәриәтле, ирекле тип Советтар хөкүмәте танығанда, башҡорт халҡы советтар менән бергә барасаҡ, тип рәсми рәүештә иғлан ҡылды. Башҡорт халҡының был тәҡдименә Ырымбур губерна Исполкомы, бәғзе бер иптәштәрҙең ҡотҡоһо менән, Башҡорт хөкүмәтенең ағзаларын ҡулға алыу менән яуап бирҙе.

Башҡорт хөкүмәтенең ағзалары араһында Зәки иптәш Вәлиди ҙә ҡулға алынды. Үҙәктең (Мәскәүҙең. — **А.Я.**) ҡулға алынған Башҡорт хөкүмәтенең ағзаларын азат ҡылыу тураһында әмере булһа ла, азат ителмәнеләр. Иркенлек, азатлыҡ донъяһына сығыу өсөн быуаттар буйына нисәмә ҡан түккән башҡорт халҡына, үҙенең хөкүмәте ағзаларының бигерәк тә Совет власы тарафынан ҡулға алныуы һәм башҡорттарҙың был азатлыҡ хәрәкәте ошондай ҡыҙғаныс бер рәүешкә кереүе сикһеҙ ауыр тәьҫир итте. Бының өҫтөнә 1918-се йыл март айында Баймаҡ заводында Башҡорт ҡыҙыл гвардияһы төҙөп йөрөгән башҡорттоң эшлекле, революцион егеттәренән Иҙелбаев, Мағазов һәм башҡаларҙың Ырымбурҙан ебәрелгән каратель отряды тарафынан атылыуҙары һәм башҡорт азатлығы өсөн эшләп йөрөгән башҡорт егеттәренең шул уҡ урыҫ ҡыҙыл гвардияһы тарафынан эҙәрлекләнеүе кеүек хәлдәр, тәбиғи, башҡорт халҡының Совет власына ҡарата ыңғай мөнәсәбәт ҡаҙаныуына иң беренсе һәм ҙур кәртә булдылар.

1918-се йылдың яҙында Дутов тарафынан Ырымбурға яһаған сапҡын һөҙөмтәһендә төрмәләге Башҡорт хөкүмәте ағзаларының ҡайһы берҙәре сығарылды. Ҡайһы берҙәре тотҡонлоҡтан ҡастылар.

1918-се йылдың яҙ баштарында Себерҙә башланған реакция көсәйеп барғанда, июнь көндәрендә Силәбегә ҡасып барып сыҡҡан Башҡорт хөкүмәте ағзаларынан Зәки иптәш Вәлиди яңынан Башҡорт хөкүмәтен тергеҙергә һәм ҡоралды ғәскәрен төҙөргә кереште. Башҡорт халҡының ҙур ниәте булған иркенлек, азатлыҡ донъяһына сығыу өсөн үткәндәге әсе тәжрибәләре — ҡораллы көстөң кәрәклеге фактын алға ҡуйҙы.

Шуның өсөн дә башҡорттоң ҡораллы көсө төҙөлә, был көстөң беренсе бурысы — башҡорттоң иреклегенә ҡаршы килеүселәргә ҡаршы тороу ине. Был ваҡыттарҙа Себерҙәге реакцияның иҙелгән халыҡтарға азатлыҡты тәьмин ҡылырҙан йыраҡ бер нәмә икәнен яңы төҙөлөп килә торған Башҡорт хөкүмәте яҡшы белгәнлектән, Башҡортостандың иреклеген тәьмин итеү юлдарына кереште һәм шул уҡ июнь айында Советтар хөкүмәтенә ике вәкил ебәрҙе. Башҡорт хөкүмәте август көндәрендә Ырымбурға күсеп килгәс тә үк, үҙенең сәйәси йөҙөн асты. Беренсе



*Хәлим Әмиров*

номерҙарынан “Башҡорт” гәзитендә Башҡорт хөкүмәте Учредительное Собрание Комитеты тарафынан яһалған бәғзе бер тәҡдимдәргә ҡаршы рәсми рәүештә: Башҡорт хөкүмәте Брестский договорҙы танымай, уның менән шаярасаҡ түгел, тип тарихи яуабын бирҙе.

Бының артынан, күп тә тормайынса, хөкүмәт тағын да советтарға вәкилдәрен ебәреү сараларын күрҙе. Был ебәрелгән вәкилдәребеҙҙең араһында Сәләх Аҙнағолов та бар ине. Был иптәш, өҫтөнә йөкләнгән эштәрҙе онотоп, фронтты уҙғас та, Бәләбәйҙә комиссар булып ҡалды. Тәбиғи, бындай башҡорт пролетариатының ҡаны менән уйнаған кешеләр, киләсәктә бер яҡтан, башҡорт фәҡир-фоҡараһы ҡаршында, икенсе яҡтан, дөйөм ярлылар ҡаршында яуапҡа тарттырылырға тейештәр!

Көндән-көн нығып барған Башҡорт хөкүмәтенең вәкилдәре Учредительный Собраниеның Комитеттарында һәм Өфөләге Государственный Совещаниеларҙа иң һул ҡанаттарҙан булғанлыҡтары бирәүгә лә йәшерен түгел.

Башҡорт хөкүмәте менән күрше булған реакцион Дутов һуңғы ваҡыттарҙа Башҡорт хөкүмәтенә иң ышаныслыҙ ҡарау менән ҡарай башланы. Дутовты, уның штабын ҡулға алырға Башҡорт ғәскәри идараһы тарафынан әҙерлектәр күрелгәндән һуң, был йәшерен әҙерлегебеҙ Ғалимаев тигән офицер тарафынан Дутовҡа белгертелде. Башҡорт ғәскәрҙәре Дутов командаһынан революцион юл менән алынып Башҡорт иле эсенә һәм уның өлкәләренә ҡуйылғандан һуң, Дутовтың ҡарашы, һис шикһеҙ, башҡорттарға ышаныслыҙ булды.

Зәки иптәш Башҡорт хөкүмәте тарафынан башҡорт ғәскәрҙәренең баш командующийы итеп билдәләнгәс, Дутов Зәки Вәлидиҙе атырға тип үҙенең ғәскәрҙәренә йәшерен бойороғон тараҡан. “Зәки ышаныслыҙ, советтар яҡлы кеше, уның менән эш ҡылырға ярамай, ул беҙҙең ҙур дошманыбыҙ”, — тигән һүҙҙәр бойороҡтоң башында яҙылғайны.

Башҡорт хөкүмәте артыҡ ҡан түгеүҙе туҡтатырға тейешлелек хаҡында советтарға тағын да һүҙен ишеттерҙе. Өфөнән аҡтар сыҡҡанда Башҡорт хөкүмәте исеменән Советтар власы һәм уның ғәскәре командованиелары менән килешеү мәсьәләләрен тикшереү өсөн Муллаян Халиҡов иптәш ҡалдырылғайны.

Был иптәштең өҫтөнә төшкән эште дөрөҫ үтәүе башҡорт халҡының советтар яғына тиҙерәк күсеүенә ҙур сәбәпсе булды.

9-сы февралдә Ҡана заводында Башҡорт хөкүмәтенең советтар яғына сығыуға йәшерен ҡарары булды. Был ҡарар 18-се февраль сәғәт 10-да ғәмәлгә ҡуйылды. Башҡорт халҡы үҙенең хөкүмәте, бер корпус ҡораллы ғәскәре менән Башҡорт Совет республикаһы тип иғлан ҡылынды.

19—20-се февралдә Темәстә булған Башҡорт ғәскәрҙәре съезы тарафынан ваҡытлы, 12 ағзанан ғибәрәт Ревкомитет (Башҡортостандың

Ваҡытлы Революцион Комитеты. — **А.Я.**) төҙөлдө. Яңы Башҡорт Совет республикаһының эштәрен алып барыу бурысы ошо комитетҡа тапшырылды.

Шулай итеп, юғарыла әйтеп уҙған ҙур ғына көрәш, ауырлыҡтарҙан һуң башҡорт халҡы ирекле донъяға сығыу юлында тағы ла ҡәтғи бер аҙым яһаны.

Март баштарында Башҡорт хөкүмәте исеменән Мәскәүҙә рәсми рәүештә барған вәкилдәр менән Үҙәк Совет респбуликаһы араһында килешеү төҙөлөп, һуңғыһы тарафынан Башҡорт иле ирекле Башҡорт Совет республикһы тип иғлан ҡылынды.

Башҡорт ревкомы советтар яғына сыҡҡас та, үҙенең 8—9 полклы ҡоралды ғәскәре менән революцияның төп дошмандары булған реакционер-монархист Дутов һәм Колчактарға ҡаршы һуғышырға теләгәнлеген һәм башҡа ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән ҡатнашып һуғышыу беҙҙең уйыбыҙ, дошманды еңеүҙә, һис шикһеҙ, ҙур файҙалар килтерәсәкбеҙ, тип (башҡорт ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыу менән 80 саҡырым киңлектә фронт асылғайны) урыҫ ҡыҙыл ғәскәрҙәре командованиеһына белдергән булһаҡ та, башҡорт фәҡир-фоҡараһының һүҙе — ҡәберлектә аҙашҡан бисара юлсының тауышы шикелле, иштелмәне.

Ысын күңелдән башҡа ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән бер сафта тороп революцияның дошмандарына ҡаршы һуғышырға теләгән башҡорт ҡаһармандарына ышаныс булманы, уларҙың йөрәктәренән сыҡҡан һүҙҙәрен ишетергә теләүсе булманы. Ул ваҡытта Башҡорт илендә хәрәкәт иткән Пенза дивизияһының башлыҡтары, башҡорт ғәскәрҙәрен тылға күсереү һәм уларҙы ҡоралһыҙландырыу тураһында бойороҡ бирҙеләр. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, бойороҡ биреүселәрҙең уйы — башҡорт ғәскәрҙәренә сәйәси аң-тәрбиә биреү ине. Стәрлетамаҡ ҡалаһына үә тирәһенә күсерелгән башҡорт ғәскәрҙәре, юғарыла әйтелгәнсә, сәйәси аң-тәрбиә алырға тейеш булһалар ҙа, эштәр киреһенсә килеп сыҡты.

Пенза дивизияһының тылында башҡорт ғәскәрҙәрен "һеҙ пленныйҙар", тип ҡаршы алдылар, барғанда кейемдәре, аттары таланды, командирҙары туҡмалды, ауылда урамға сығарып сәстәренән һөйрәп ҡыйнанылар. "Һеҙҙе атабыҙ", — тип, урамға сығарып теҙеп мылтыҡтар төбәп көлдөләр, йәберләнеләр. Күп ваҡыттарҙа ашарға бирмәйенсә ас тоттолар. "Башҡорттарға ireклек биреләсәк түгел, һеҙҙең башҡаларығыҙҙың барыһы ла ҡулға алынған", — тип, ғәскәрҙәр араһында асыҡтан-асыҡ һөйләй башланылар. Был ҡыҙғаныс хәлдәрҙе ишетеп, Башҡорт ревкомы хәлдәр менән таныштырыу өсөн үҙенән кешеләр ебәрһә лә, уларҙы ғәскәрҙәребеҙгә керетмәнеләр. Бының өҫтөнә ябай башҡорт граждандары араһында ҡыҙғаныс хәлдәр береһе артынан береһе тыуа башланы. Һис гөнаһы булмаған башҡорт ылаусылары, һис нәмәгә ҡатнашы булмаған ауылдың аңлыраҡ кешеләре, бөтә башҡорт халҡының иң ҡәҙерле кешеләренән шағиры Бабич, үткер ҡәләмле яҙыусыһы Иркәбаев үә башҡалар атылдылар.

Күп башҡорт ауылдарында Пенза дивизияһының ҡыҙыл ғәскәрҙәре тарафынан күп кенә башҡорт ҡыҙҙары, ҡатындары, мөғәллимәләре көсләнде, мәсхәрә ителде. Башҡорт халҡының ирек, азатлыҡ донъяһына сығыуы ҡыҙғаныс булды. Ҡорбандарыбыҙ йөҙәрләп һанала. Шул уҡ

ҡыҙыл ғәскәрҙәр башҡорт ауылдарынан үткәндә, башҡорттоң тәҙрәһеҙ, ишекһеҙ 10—15 йорттан ғибәрәт булған ауылдарына 100—200 меңләп контрибуциялар һалып, түләй алмағас, меҫкен ярлыларҙың аҡтыҡ икмәктәрен, аттарын алдылар. Быны тыйған Үҙәктең ҡәтғи әмерҙәре үтәлмәне. Таланыу, атылыу, иҙелеү, һаман да хөкөм һөрҙө.

Бисара башҡорт халҡы, бигерәк тә уның ҡыҙыл ғәскәрҙәре советтар яғына сыҡҡас, күп ауырлыҡтар, иҙелеүҙәр күрҙеләр.

Беҙ ышанабыҙ киләсәктә быға бәйле ғәйеплеләрҙе тарих беҙгә күрһәтәсәк. Һуғыш хәлдәренең бер аҙ беҙҙең өсөн сыуалып китеүе сәбәпле, Башҡорт ревкомы үҙенең иленән күсергә мәжбүр булды.

Май баштарында Башҡорт ревкомы Үҙәктең күрһәтеүе буйынса Пенза губернаһы Саранск ҡалаһына күсеп килде һәм ревком артынан уҡ советтар яғына сыҡҡан бер корпус ғәскәрҙәренең ҡыҙғаныс ҡалдыҡтары ла күсеп килде.

Саранскиҙа төҙөлә башлаған дүрт полк ҡыҙыл башҡорт ғәскәрҙәре 10-сы июндә көньяҡҡа оҙатылдылар.

Көньяҡ фронтта дүрт ай һуғышып, үҙҙәренең элекке ҡаһарманлыҡтарын күрһәткән башҡорт ҡыҙыл ғәскәре пролетар революцияның усағы булған Петроградты һаҡларға Көньяҡ фронттан Төньяҡ-Көнбайыш фронтҡа күсерелде.

Хәҙер Петроград фронтында башҡорттоң бер атлы дивизияһы һәм бер йәйәүле бригадаһы һуғыша.

*Хәлим ӘМИРОВ.*

## КҮСӘРБАЙ
### (Финляндия фронтында Башҡортостан ҡыҙыл ғәскәрҙәре)

I

Петроградтың бөтөн урамдары тын, ҡайҙалыр бер яҡҡа атлаған йәйәүле кешеләрҙең аяҡ тауышы һәм һирәк-һаяҡ ҡына ҡысҡырған командалар ишетелә.

Башҡорт иленең төҙөлөшөнә килһәк: хәҙер Башҡортостандың һәр ерҙә советтар төҙөлөп бөттө, идара эштәре рәткә һалынды, хәҙер башҡорт иле тынысланды. Быуаттар буйына иҙелгән башҡорт халҡы бер иркен һулыш алды.

Торған дежурында паровоздар тауышынан башҡа, һис нәмә ишетелмәй. Бөтөн завод, фабрикалар эштән туҡтаған, һәр нәмәлә лә, һәр кемдә лә һалҡынлыҡ. Бөтөн халыҡ әллә ниндәйҙер бер инде. Бөтөн нәмәләр ҙә, халыҡтарҙың уйҙарын уртаҡлашҡан шикелле, тын ғына ҡалған. Һәр кем, һәр нәмә әллә ниндәйҙер бер ҡурҡыныс алдында.

Күп тә үтмәй, бер ҙур урамдың арғы башынан Питер халҡына яҡын музыка тауышы менән ҡатыш Питер халҡына ят, шулай ҙа һөйөклө әллә ниндәй сит һүҙҙәр менән йырланған тауыш менән бөтөн ҡаланы яңғыратып, тәртипле колонналар менән теҙелгән, “Берләшегеҙ, бөтөн донъя юҡһылдары!”, “Йәшәһен Өсөнсө Интернационал!”, “Үлем бөтөн

донъя буржуйҙарына!" тип матур буҫтауҙар менән яҙылған лозунгылар, ҙур ҡыҙыл байраҡтар күтәргән, бөтөн донъя буржуазияһына дәһшәт бирерлек бер күренештә Башҡорт йәйәүле бригадаһы, уның алдында, оҙон уҡтарын күккә төҙләгән шәм шикелле байраҡтар күтәргән, күптән йөрөп өйрәнеп бөткән һалдаттарҙың йөрөгәндә ҡулдарын сайҡаған шикелле музыка яйына баштарын һелкеп килгән аттар менән Башҡорт атлы дивизияһы алдан тәғәйен ҡылынып ҡуйылған ҡаланың ҙур бер майҙанына ҡарап килгәне күренде.

Ғәскәрҙәр майҙанға килеп етеүгә, халыҡ та һәр ҡайһыһына алдан әйтелеп ҡуйылған шикелле, ғәскәрҙәргә берәр генә урын ҡалдырып, бөтөн майҙанды ҡаплап алғайны. Бөтөн халыҡта ят бер тойғо, ят бер шатлыҡ, ят бер хис. Хас умарта ҡорто шикелле ҡайнай, арттағы рәт, йырағыраҡ ҡалғандары алға керергә тырыша, алдағылары инде быларҙы ҡарап бөттөм, тегеләрен ҡарайым тигән шикелле артҡа сыға, икенсе яҡҡа барып ҡарай.

Ғәскәрҙәр тын, әллә ниндәй бер ялҡынлы хис менән бөтөнөһө майҙандың уртаһына ҡуйылған минбәргә (трибуна) күҙ төбәп ниндәйҙер бер һүҙ ишетергә, бер бойороҡ алырға әҙерләнгән.

Бейек минбәрҙән: "Иптәштәр!", — тип ҡысҡырған, ғәскәрҙәр өсөн таныш, башҡа халыҡҡа ят, яңы бер һүҙ бөтөн халыҡты тынға ҡалдыра.

"Иптәштәр!" һүҙенән һуң, халыҡ бер аҙ тынғанын көтөп тороп, бер аҙ тынлыҡтан һуң шул "иптәштәр" һүҙен ҡабатлаған нисә айҙар ғәскәрҙәрҙең үҙҙәре менән юлбашсы булып йөрөгән иптәштәре һүҙгә керешеп: "Мин уйлайым, һеҙҙең һәр ҡайһығыҙ бында нимәгә килгәнде, нимәгә бында йыйылғанды бик яҡшы беләһегеҙ. Һәм беҙ илдәребеҙҙән киткән ваҡытта беҙгә әйтелгән "Петроград ҡурҡыныс алдында! Батша ялсыһы, генерал Юденич бөтөн буржуа, поп балаларынан ғибәрәт, һатлыҡ рус һәм фин офицеры ҡалдыҡтары менән Петроградҡа һөжүм итә! Һеҙ шул капитал ялсыларын донъя йөҙөнән юғалтығыҙ, Петроградты һәм ундағы эшсе пролетариатты бөтөн завод, фабрикалары менән дошман, аҡ бандалар ҡурҡынысынан ҡотҡарығыҙ!", — тигән һүҙҙәр әлдә булһа ҡолаҡ төбөгөҙҙә яңғырап тора торғандыр. Бына беҙ үҙебеҙгә йөкмәтелгән шул бурысты үтәмәйсә, тимәк, Петроград ҡаршында булған аҡ бандаларҙы һөрөп сығара алмайынса, беҙ бынан ҡайтырға тейеш түгелбеҙ!"

Иптәштең ҡыҙыу, ялҡынлы һүҙҙәре бөтөн халыҡты хәрәкәткә килтереп, һүҙе бөтөр-бөтмәҫтән: "Долой буржуазияны! Йотабыҙ беҙ уларҙы! Эшселәргә ҡаршы торғандарға, беҙ бар ваҡытта юҡ уларға донъяла урын! Йәшәһен Совет власы! Йәшәһен эш! Ура!" тауыштары, музыка менән буталып, бөтөн ҡаланы һелкетә, тетрәтә. Эшселәр, ярлылар шатлыҡтан, ҡасып ҡалған буржуйҙар ҡурҡыуҙан тетрәй, ҡалтырай.

Ғәскәрҙәр менән бергә килгән һәм Питерҙың башында торған бик күп коммунистар, бер-бер артлы бик күп иптәштәр башҡорттарҙың баһадирлыҡтарын, һуғышҡа оҫталыҡтарын, Совет хөкүмәтенә күп ярҙамдар итәсәген, халыҡ, тоғролоҡ, коммунизм нигеҙенә ҡараған Совет хөкүмәтенә, уларҙың бөтөн хаҡлы теләктәрен үтәйәсәген һөйләгәндән һуң, тәү башлап "иптәштәр!", тип һүҙ башлаған иптәштең элеккенән дә тулы, шатлыҡлы, ғәйрәтле тауыш менән: "Митинг бөттө, таралырға

мөмкин!” — һүҙе ишетелеү менән ҡала халҡы геү килеп ҡуҙғалған арала, ғәскәрҙәргә ҡайтыу тарафына боролорға яһаған командалар ишетелә башланы.

Халыҡ тарала. Һәр кемдә яңы шатлыҡ, ят бер тойғо. Үҙ-ара һөйләшә, тағы әллә кемдәргә һөйләргә, алған тойғо-шатлығын әллә кемдәр менән уртаҡлашырға ашҡына.

II

Бригаданың командиры һәм комиссары ҡушыуы буйынса, бригадаға бирелгән бөтә участка полктарға бүленеп, һәр полк үҙенә тигән участканы дошман яҡын килеүҙән һаҡлар өсөн, юл буйҙарына, тау итәктәренә “ялан ҡарауылдары” ҡуйып, часовойҙарға “паролдәр” (үҙ кешеһе икәнде белеү өсөн һорала торған, электән тәғәйен киленгән бер нәмәнең исеме) биреп, һәр кешеһен урынлаштырып бөтөргән.

Һәр иптәшкә күп итеп патрон, яраланһа, бәйләр өсөн марля — “аҡ кисиә”, газдан һаҡланыр өсөн битлек — “маска”, һәр взводҡа пулеметтар өләшелгән.

Бөтә донъяны тынлыҡ, ҡараңғылыҡ ала. Бына хәҙер-хәҙер бөтә донъяны тетрәтә торған пушка, пулемет, мылтыҡ тауыштары ишетелә башлап, бөтә донъя әлләниндәй дәһшәт аҫтында ҡалыр төҫлө тора.

Ихтыярһыҙ ҡулдар мылтыҡты тағы ла ҡыҫыбыраҡ тота, күҙҙәр дошман тарафына тағы ныҡлы, асығыраҡ ҡарарға, ҡолаҡтар ҙа саҡ ҡына ишетелгән, шыбырлаған тауышҡа ла әллә ниндәй мәғәнәләр биреп, йөрәк ярһыуынан дөп-дөп тибә башлай. Бына-бына хәҙер һуғыш башланыр төҫлө.

III

Күсәрбай полк башлығы янында әмер йөрөтөү өсөн тәғәйен ҡылынғайны. Күсәрбайҙарҙың полкы бер һыу буйына урынлаштырылып, һыуҙың арғы яғында күренмәҫлек шактай йыраҡ ергә йәйелгән дошман ғәскәрҙәре күпме, көсө нисек, ниндәй ғәскәрҙәрҙән ғибәрәт икәнен Күсәрбай командирҙан ишеткән булһа ла, ул шуларҙы үҙе беләһе, үҙ күҙе менән күрәһе килә.

Рота башлығына йомош менән барған ваҡытта, алдағы линияға яҡын килеүенән файҙаланып, Күсәрбай түҙмәй, һыу буйына әкрен генә сүгәләп, ята-ята барып бер ҡәҙәр ҡарап торғандан һуң, һыуҙың бер сабығының елһеҙ һелкенеүенән шикләнеп, бында, моғайын, дошмандың наблюдательный посты барҙыр, тип уйлап, тиҙ-тиҙ генә, ашыға-ашыға ҡайтып, командирға: “Ана икенсе взводтың полевой ҡарауылынан аҙ ғына уңдараҡ, һыуҙың арғы яғында, ярҙың бер ҡултыҡланып сығып торған еренә үҫкән тал тирәләрендә шик бар. Часовойҙар шул ергә нығыраҡ күҙ һалһындар ине”, — ти ҙә, үҙенең шул ергә барып, асыҡлап киләһе килгәндән, шул яҡҡа үҙен был төндә разведкаға ебәреүен командирҙан һораны.

Командирҙың: “Юҡ, Күсәрбай, унда сығып һин үҙ-үҙеңде генә һәләк итерһең. Унда бит бер кеше генә булмаҫ, һинең сығыуыңды һиҙеп ҡалһалар, үҙеңде ҡулға алып штыкка күтәрерҙәр. Беләһең бит, улар хәҙер башҡорттарға ниндәй асыулы”, — тиүенә ҡаршы Күсәрбай: “Юҡ иптәш, эш бер минең турала ғына түгел бит, бер мин бөтөүҙән бөйөк

мөҡәддәс эш өсөн бер ни ҙә булмаç. Бөтһәм, революция өсөн йәнемде ҡорбан иткән тағы бер башҡорт ҡыҙылармеецы булған булырмын. Ихтимал, иçән ҡалһам, минең разведканан ҙур файҙа булыр. Үҙемдең генә түгел, башҡа иптәштәремдең дә иçән ҡалыуы менән бергә оборонаға ла ярҙам иткән булырмын. Иптәш командир, мин бармайынса түҙә алмайым, һин мине ебәр", — ти. Быныҡ үткен разведчик икәнен командир күптән белгәнгә, уның оçта аҡыл менән йөрөйәсәгенә ышанып, рөхсәт итеү менән, янындағы башҡа һалдаттар ҙа, уның менән беҙ ҙә барабыҙ, тип командирҙан һорай башлайҙар.

Ләкин Күсәрбай: "Юҡ, һеҙ миңә кәрәкмәйһегеҙ, мин үҙем генә барам. Һеҙ унда йөрөй белмәйенсә, тауыш сығарып, һиҙҙереп, барыбыҙҙы һәләкәткә илтерһегеҙ", — тине лә, китә лә башланы.

Күсәрбайҙың разведкаға китеүенә ярты сәғәт кенә үткән булһа ла, һуғыш ерендәге һәр минут — сәғәт шикелле тойолғанға, командир һәм иптәш һалдаттары Күсәрбайҙың оҙаҡ килмәй тороуына аптырап, әллә дошман ҡулына төштө инде, тип борсола башланылар. Күп тә үтмәй, бөтә тынлыҡты ярып, үлем алдында ғына ишетелә торған бер ҡыҙғаныс тауыш һыҙылып килеп ҡарауылда торған бөтөн башҡорт ғәскәрҙәренең ҡолағына ишетелде.

Тауыштың шул ҡәҙәр ауыр, ҡыҙғаныс булыуына бөтөнөһөнөң иçе китеп, был тауыш кемдеке, ҡайҙан килгәнен дә аңлап, уйлап алманылар. Шуның артынан уҡ пулемет шатырланы, уның артынан орудие ҡушылды, мылтыҡ тауыштары ишетелә башланы. Тауыш хаҡындағы уйҙы баштан сығарып, һөжүм иткән дошманға ҡаршы тороу ваҡыты еткәнен һиҙеп, бөтөнөһө берҙән дошманға ут асырға керештеләр.

Бына ике яҡтан да атыш, пулемет тауышы, орудие гөрһөлдәүе, өҙлөкһөҙ атылған мылтыҡ шартлауы донъяның аçтын-өçкә килтерә.

"Ура!" тауыштары ишетелә, атыш менән сикләнмәйенсә, атакаға күтәрелеп, һыуҙың был яғына сыҡҡан бөтөн дошман ғәскәрен турап бөтәләр.

Унда аяҡһыҙ, бында ҡулһыҙ, ҡайһыһы үлек, ҡайһыһы тере, әҙерәк йәне бары аһылдап ята... ҡиәмәт...

Дошман беҙҙекеләргә ҡарағанда, шаҡтай күп ине. Һыу аша сыҡҡан ваҡытта пулемет менән күбеһе туралған икән. Атака еңел тура килде. Аҙ ғына ваҡытта һыуҙың тирә-яғына сыҡҡан дошмандың бер һалдаты ла ҡалмаған, барыһы ла туралып бөткәйне. Бер ситтә, һиҙмәçтән, әкрен генә һул ҡулын ҡайыш менән муйынына аçкан кешенең, часовойға тап килеп, часовойҙың: "Стой, кем һин!", — тип һорауы, "мин үҙебеҙҙеке", тип әкрен генә биргән яуабынан быныҡ Күсәрбай икәнен һиҙеп, яҡын тирәлә булған бөтә һалдаттар, Күсәрбайҙы һырып алып, землянкаға төшкәнсә, "эй, нисек ҡотолдоң, ниҙәр булды, һөйлә иптәш", тип бөтөнөһө быныҡ хәле менән таныша, ҡайғыһын уртаҡлаша башланылар.

Шунда уҡ бер нисәүһе үҙҙәренең бинттары менән Күсәрбайҙың кинжал менән яраланған ике беләген дә бәйләргә керештеләр. Был да шул арала үҙенең ҡайҙа нисек яраланғанын һөйләргә керешеүҙән элек иптәштәренә ҡарап: "Иптәштәр! Бөтөнөгөҙ хәҙер һаҡ тороғоҙ! Аҡтарҙың бандалары, бер ни ҡәҙәр фин һалдаттары менән нисек булһа ла бөгөн таң атҡансы был һыу буйын алып, һыуҙың был яғына, тау буйына

артылырға тырышасаҡтар. Иптәш командир! Мин хәҙер һеҙгә, резервта (һаҡлыҡта) торған бөтөн көстө бер-ике саҡырымға үҙебеҙҙең позицияны нығытырға кәңәш итәм. Уларҙың һаны күп булһа мең ярым — ике меңдән артмаç, шулай ҙа улар бөгөн асыу менән бик ныҡ тырышасаҡтар, ныҡ әҙерләнмәһәк, зарар итеүҙәре бар. Инде уларҙың бөгөнгө һөжүмдәренә бирешмәçбеҙ, уларҙың артында запас көстәре юҡ. Беҙ уларҙы ҡыуып китә алырбыҙ. Уларҙы беҙ ҡыуа башлаһаҡ, кәрәктәрен бирмәйенсә туҡтамабыҙ — быныһы шулай.

Ә минең ҡулға килһәк, иптәштәр, мин һеҙҙең яндан киткәс тә, әкрен генә үҙебеҙҙең цепь ята торған һыу буйына барҙым да иң элек аяҡтарҙы сисеп, ҡараңғыла күҙҙе өйрәтер өсөн ергә ятып бик оҙаҡ ҡарандым, янымдағы кинжалдан башҡа бар нәмәләремде ташланым.

Теге яҡта ла беҙҙеке шикелле цепь юҡмы икән тип ҡарандым да, туп-тура теге яҡ ярға, бер ҡыуаҡҡа ғына ҡарап аяҡ үрә генә йөҙөп, беләһегеҙ бит, иптәштәр, мин әлектән үк йөҙөргә оçта, яр ҡырына еттем тигәндә генә бер-ике кешенең әкрен генә һөйләшкән тауыштары ишетелә башланы. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, берәһе урыç булһа кәрәк, бик таҙа урыçса һөйләй. Быныһы инде Петроградтың бер буржуйы балаһы, офицерҙыр, юҡһа былар менән булмаç ине, тип уйлап ҡуйҙым. Бик асыуым килде. Икенсеһе фин булһа кәрәк, сөнки бер ҙә беҙҙәге урыçтар шикелле һөйләмәй.

Инде уларҙың һөйләшкән һүҙҙәренә килһәк, нәмәләр һөйләшкәне бик мәғлүм инде. Иптәштәр, минең сәстәрем үрә торҙо. Уларҙан ҡурҡып түгел, урыç офицерының һөйләгән һүҙҙәренә асыуым килеп.

Иптәштәр! Белһәгеҙ ине, минең нисек асыуым килеүен. Уның: “Башҡорттарҙың донъя йөҙөндә берәһен дә ҡалдырмаç кәрәк, урыç пролетариатына, урыç большевиктарына хәҙер шулар бик күп ярҙам бирә, уларҙы шуның өсөн сәйнәп бөтөрөргә кәрәк”, — тигән һүҙҙәрен ишеткән ваҡытта, мм... (Күсәрбай тештәрен ҡыçып) шул урында үҙен сәйнәргә етешеп торҙом. Ул шул ҡәҙәр күп һөйләне. Һөйләй-һөйләй ҡайҙа торғанын да онотто шикелле. Уның һүҙҙәрен ишеткән һайын минең асыуым килеп, туҡта, (үҙ-үҙемә) былар бит икәү генә. Мин быларҙың икеһен дә эш итә алам бит, тип йәшенеп торған ерҙән әкрен генә сығып, бер ҙә ҡыштырламайынса ғына быларҙың өçтөнә ынтылдым. Улар хуштарын йыйғансы мин үткер кинжал менән финдең йөрәгенә ҡаҙағайным. Уның шуның менән эше лә бөттө тигәндә, шунда уҡ икенсеһенә ырғыным. Унда ла кинжал, миндә лә кинжал. Ҡулдарынан кинжалын ҡайырып алдым да ысҡына тигәндә генә елкәһенә батырҙым үҙ кинжалы менән. Бына инде шул ваҡытта ул бер ҡысҡырып ҡалды. Буржуй, мин тегене йыҡҡанда йоҡлап тормаған бит. Минең беләккә берҙе кейҙереп алған, ярай әле һул беләккә эләккән. Мин ул ваҡытта һис нәмә һиҙмәгәйнем. Ну, үҙҙәрен дә эш иттем һуң, эттәрҙе. Ысын-ысынындан эт үлеме менән бөтөрҙөм”. Иптәштәре бер ауыҙҙан әйтә: “Шулай кәрәк ул, буржуйҙарға, етәр инде беҙҙең ҡанды күп эстеләр. Инде түләр көндәре етте. Беҙ ҙә, иптәш, бирҙек кәрәктәрен. Ранендарын да йыйып алманылар. Уйнамаһындар беҙҙең Ҡыҙыл Армия менән! Уның эсендә башҡорттар барын да онотмаһындар!” — тинеләр.

Күсәрбай: “Юденич менән финдарҙың күрмәгәндәрен күрһәттек, француз менән инглиздарға ла бына шул кәрәк ине”, — тине. Иптәштәре бер ауыҙҙан: “Совет хөкүмәтенә ҡаршы һуғышып булашһалар, уларына ла сират етер әле. Был ҡамсылар, был кинжалдар уларҙың ҡысыуын алыр”. Шул саҡта Күсәрбайҙың: “Иптәштәр, — тине һәлмәк тауышы, — беҙҙекеләр һөжүм башланы, әйҙәгеҙ киттек, бөтә буржуйҙарҙы ҡырып бөтмәйенсә туҡтамайыҡ!..”

*Фәтхи.*

## Башҡортостан хәрәкәте

Башҡортостан хәрәкәте башҡорт халҡының тарихы менән таныш булған кешегә башҡорт халҡының Февраль, Октябрь революцияларында ғына ҡуҙғалыуҙары түгел, бынан элек әллә нисә йылдар буйына, нисә йөҙ мең ҡорбандар, әллә ниндәй иҫ киткес фажиғәләр аҫтында ҡатын, бала-сағалары менән берлектә үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡларға тырышып залим, тиран батшаларға ҡаршы һуғышып йөрөгән дәүерҙәре иҫкә килә. Ләкин ул ваҡыттарҙа, башҡа тарафтарҙа булмаған, фәҡәт яңғыҙ башҡорт революциялары ғына ҙур Рәсәйҙең әллә ниндәй оҫта сәйәсәттәре менән һүндерелгәйне.

Шулай ҙа революция орлоҡтарын һаҡлаған, революция эсендә тыуған, революция менән һуғарылған башҡорт халҡына Февраль революцияһы ҡом сәхрәләрендә һыуһаған кешегә эсергән һыу кеүек тойолдо. Февраль революцияһы тыуыу менән әллә ҡайҙарҙа, Урал тауҙары араларында Романовтарҙың сәйәсәттәре менән таратылған башҡорт халҡы бер йән, бер тән булып бөтөнөһө ойошто һәм үҙҙәренең йәберләнеп, тартып алынған хоҡуҡтарын һорау өсөн берәр ойошма төҙөргә, электән ҡалған революция орлоҡтарының үҫеүенә, был дөйөм Февраль революцияһының ҙур форсат булғанлығын белеп, бергәләп хәрәкәт итергә булдылар.

Һөҙөмтәлә, Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылып, һәр йәһәттән иң артта, иң ватылған, боҙолған, иң мәсхәрәләнгән башҡорт халҡы яңынан самодержавие дәүеренә ҡайтмаҫҡа, бәлки, нисек тә үҙ алдарына киләсәк тормошто тәьмин итерҙәй бер орлоҡ ҡалдырып, шуны үҫтереү сараһына бергәләп ныҡлыҡ менән килешергә булып, шул эшендә уларға юлбашсылыҡ итер өсөн үҙҙәре араһынан иң ышаныслы кешеләрҙән

*Ғабдулла Ибраһимов*



идара — “Башҡорт Мәркәз шураһы” төҙөп, бөтә мәсьәләне шуға йөкмәттеләр. Шулай итеп, башҡорт халҡы киләсәген тәьмин итергә, самодержавие ҡоллоғонан ҡотолорға бер нигеҙ ҡуйҙы.

Был ваҡыттарҙа (Октябрь революцияһына ҡәҙәр) бөтөн Рәсәй ҡара томан хәлендә булып, һәр бер халыҡтың нисек хәрәкәт иткәнлектәре мәғлүм булмауы өҫтөнә, яңы ғына кисергән, батшалар дәүеренән мираҫ булып ҡалған, тар күңеллеләрҙең иҙелгән халыҡтың тын алыуына ғәрләнеү, көнләшеү тигән эҙ ҙә бөтмәгәйне. Шуға күрә Башҡортостан хәрәкәтенә ҡараштар, фекерҙәр төрлөсә булды. Ләкин ысынында башҡорт халҡы Февраль революцияһының уның Февраль революцияһы булғанлығы өсөн генә ҡатнашманы, бәлки, үҙе теләгәндәрен, үҙенең алға алған маҡсаттарын шундай ҙур форсат арҡаһында ғына майҙанға ҡуйыу мөмкинлеге булғаны менән генә ҡатнашты. Шуға күрә лә әллә ниндәй “һыуға яҙылған” “Милли-мәҙәни мөхтәриәт”, “Иҙел-Урал” кеүек батшалар көйөнөң тауыштарына иҫтәре китмәүе, туранан-тура үҙ тормошон тәьмин итерҙәй “Ерле, иҡтисади мөхтәриәт” һорап, майҙанға сыҡты. Февраль революцияһы һуңынан да идара буржуа ҡулында булғанлыҡтан, башҡорт халҡы үҙенең ошо изге теләктәре арҡаһында әллә ниндәй ауырлыҡтар, хурлыҡтар, ҡараңғы көндәр кисерҙе.

Ысынында һәр йәһәттән эттәр уратып алған хәйерсе күренеше тыуҙы, һәр форсаттан файҙаланып, Башҡортостан хәрәкәтен насар итеп күрһәтергә тырыштылар.

Октябрь революцияһы тыуыу менән дә Башҡортостан хәрәкәтенә ҡараш элеккесә ҡалды, бәлки, ҡаршы хәрәкәттәр ялған шикәйәт яҙыу дауам итте. Һөҙөмтәлә, шундай урынһыҙ шикәйәттәр яҙыу арҡаһында насар күрһәтелеп, Башҡортостанда күңелһеҙ “Февраль революцияһы”, “Баймаҡ фажиғәһе” тыуҙы.

Ләкин, алтын серемәгән кеүек, башҡорт халҡының зарығып-зарығып нисә йылдар буйына теләгән хаҡлы теләктәренең дә тормошҡа ашыуына, үҙҙәре кеүек иҙелгән халыҡтар яҡлаусыһы булған Совет власының иҙелгән башҡорт халҡын онотмаясағына ныҡ ышанды. Һөҙөмтәлә, Башҡортостанда 1919-сы йыл 18-се Февраль революцияһы майҙанға сыҡты. Был көн — тарихта, залимдар мәсхәрәһенә түҙә алмайса башҡорт халҡының 78 мәртәбә баш күтәреп, нисә йөҙ меңдәр ҡорбан биргән, туҙҙырылған, аҡтыҡ ҡандары ҡалғанға ҡәҙәрле, интегә-интегә зарығып теләгән теләктәренең, ниһайәт, майҙанға сыҡҡан көнө.

Был көн — төрлө ялған шикәйәт менән батшалар ваҡытында башҡорт халҡын ҡол итергә, революция ваҡытында бысраҡ яғырға тырышҡан яуыз дошмандарынан айырылған көн.

Был көн — ҡанһыҙ батша ялсыларының төрлө тоҙағынан, наҙанлыҡ пәрҙәһенән, наҙанлыҡ арҡаһында дәһшәт биргән урядник, стражниктар тауыштарынан, боярҙар, дворяндар, алпауыттар тоҙағынан ҡотолған көн.

Бөгөнгө көн — сылтырап аҡҡан йәмле-тәмле йылғалар, Урал тауҙарының ҡиммәтле байлыҡтары, хәтфә кеүек йәм-йәшел, йәмле, данлы ерҙәренең алпауыттар, боярҙар, банкирҙарҙың хәйләле ҡулдарынан ҡотолоуына, үҙ байлыҡтарынан, үҙ тормошонан үҙҙәре теләгәнсә файҙаланыу мөмкинлеге майҙанға сыҡҡан көн.

Бөгөнгө көн — батшаларҙың беренсе тоҙаҡтары булған наҙанлыҡ пәрҙәһе асылған көн, ватылған, иҙелгән ике халыҡтың бер-береһе менән үбешеп күрешкән, мәңгелек ысын тормош юлдашы булырға вәғәҙә бирешкән көн.

Бына шул көндөң ысын хәҡиҡәтен аңлап башҡорт халҡы үҙҙәре кеүек ярлы халыҡ менән ҡулға-ҡул тотоноп эшкә кереште. Советтарға төрлө тарафтан һөжүм иткән батша ялсыларына ҡаршы Рәсәйҙәге башҡа ярлы халыҡ рәтенән ярлы башҡорт штыктары ла терәлде. Көньяҡ тарафтан һөжүм иткән Деникинға бер атлы дивизия, бер йәйәүле бригадаһы дәһшәт һалды, Деникиндың ҡанын эсеп, революция үҙәге Петроградты һаҡларға килде. Бында, Юденич Петроград ҡапҡаһына керергә ашҡынғанда, башҡорт ғәскәрҙәренең штыктары күренгәс, нисек әйләнгәнен һиҙмәне. Төрлөсә һөжүмдәр яһап торған финдәр, Фин фронтына башҡорт ғәскәрҙәре барыу менән һөжүмдән туҡталдылар.

Бер атлы Башҡорт бригадаһы Төркөстан фронтында. Башҡортостан мәмләкәтенең эске эштәре ышанысլы ҡулдарҙа булып, улар үҙ нәүбәттәрендә яҡшы ғына яңы эштәр эшләгән кеүек, башҡорт ғәскәрҙәре лә үҙҙәренә киң хоҡуҡ бирелгән Совет власын сит дошмандарҙан һаҡлау вазифаһына кәмселек килтермәйсә, хайран ҡалырлыҡ яңы батырлыҡтар эшләй улар. Бына шундай тарихта үҙ урынын, үҙ көсөн Октябрь революцияһында күрһәткән башҡорт ғәскәрҙәре башҡорт халҡының ирекле донъяға, бөтә донъя ижтимағи революцияһына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы байрам итә.

Күп тотҡонлоҡтарҙа торған халыҡтың яҙмышы, яҡшы тормошо фәҡәт Совет власын урынлаштырғанда ғына мөмкин буласағына ышанып, бөтә Башҡортостан халҡы бөгөнгө көндө иң ҙур, иң хөрмәтле байрамдарҙан һанай. Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәре, бигерәк тә, һәр һуғыштан, һәр бер фронттан яҡшы хәбәре булып, был байрамдың (бер йыллығы. — **А.Я.**) инҡилаб мәркәзе Питерҙа тура килеүенән файҙаланып, яңы-яңы өмөттәр менән яҡты киләсәкле Башҡортостандың йәшәүе фәҡәт Совет власы менән генә тәьмин ителәсәгенә ышанып, бөтөн көс, бөтөн ҡорбандарының шуға сарыф ителеүенә әһәмиәт бирә. Һәм бөтә иҙелгән халыҡтарҙың тормошоноң яҡшы юлға ҡуйылыуы хаҡына бирелгән ҡорбандарға ҡарамаҫтан, теләгән эштәребеҙҙе майҙанға ҡуйыуға ҡаршы булған бөтә революция дошмандары, элекке заман кешеләре башҡорт халҡын юлдан сығарырға, уны советтарға ҡаршы ҡуйырға бик күп тырышалар, ошо маҡсат менән был көндәрҙә “Советтар инде башҡорттарҙы бөтөнләй бөтөрәләр”, — тип, провокация тараталар, ялғанлайҙар. Иптәштәр, ул дошмандарҙың һүҙҙәре.

Дөрөҫ, көс сарыф ителеп, алға алған эштәргә ниндәй генә мәңгелек тимер ҡапҡалар ҡаршы булһа ла, ул майҙанға сығарыласаҡ, бөтөн донъя ижтимағи революцияһына ҙур юл асыласаҡ. Башҡорт халҡының көткәне лә шул.

Йәшәһен Өсөнсө Интернационал флагы аҫтында ойошҡан иҙелгән халыҡтар берлеге!

Йәшәһен Рәсәй Совет хөкүмәте һәм Башҡортостан!

*Ғабдулла ИБРАҺИМОВ (Ҡаракыпсак).*